***Рафаэль АҘНАҒОЛОВ,***
***педагогия фәндәре докторы***

# Кеше асылын тойоусы әҙип



Танылған журналист, әҙип Сәлимйән Бәҙретдиновтың ижадын өйрәнә килә, үҙемә бер асыш яһағандай булдым. Башҡорт халҡының арҙаҡлы шәхестәрен, этномәҙәниәтенең тарихын тәрәнерәк белгең килһә, уның әҫәрҙәрен, яҙмаларын ҡулыңдан төшөрмәй уҡыу зарурҙыр. Улай ғына ла түгел, уның ижад үрнәктәрен мәктәп уҡыусыларына, юғары уҡыу йорттары студенттарына тормош һабағы сифатында өйрәтеү кәрәктер.

Һәләтле әҙиптең, журналистың ижад балҡышы, атылған йондоҙ яҡтыһы кеүек, кеше хәтеренән һүрелмәй. Ҙур ижадмы, бәләкәйме, ул — үҙ уҡыусыһының күңелен байытыусы, яҡтыртыусы рухи шәм, хазина. Яҙыусылыҡ эше — өҙлөкһөҙ эҙләнеү, ижад эше. Шул саҡта хазиналар табыла, күңел шәме балҡый.

Халҡыбыҙҙың йәшәү рәүешендәге тәрән тамырҙар, асылдар ныҡлап өйрәнелмәгән әле. Сәлимйәндең китаптарын уҡып сыҡҡас, быға мин тағы ла бер ҡат инандым. Талантлы журналист һәм яҙыусының китаптарының ҡайһы берҙәрен атап китәйем. Бына улар: ”Таңды ҡоштар уята”, ”Ғүмер артында — ғүмер”, ”Ҡан ҡәрҙәштәр төйәге”, ”Отчий край ты, мой Учалы”, ”Зов родной земли”...

Быйыл Башҡортостан ”Китап” нәшриәте уның ”Терееләргә — тере һыу” тигән ҡалын ғына (25 табаҡ самаһы) китабын баҫтырып сығарҙы. Энциклопедияға торошло был йыйынтығында автор ил-йортобоҙ, халҡыбыҙ көнитмешенең асылдарын, ғибрәтле хәл-ваҡиғаларын, тормош, йәшәйеш ғилләләрен сағылдыра. Геройҙарының эш-ҡылыҡтары, яҙмыштары уҡыусыларҙы тәрән уйландыра, ғүмерҙең мәғәнәһенә үтеп инергә ярҙам итә. Һәр әҫәр бай һәм образлы тел менән яҙылған. Шуны ла әйтергә кәрәк: Сәлимйән — оҫта стилист, тәбиғи, халыҡсан телмәр менән ижад итеүсе, тел көҙрәтен һаҡлаусы һәм халыҡҡа еткереүсе әҙип. Халыҡ ижадын һәйбәт белеүе лә тойомлана, әҫәрҙәрендә фәһемле риүәйәттәрҙе, әйтемдәрҙе уңышлы ҡуллана.

Тәүҙә китаптың авторы, арҙаҡлы ир уҙаманы Сәлимйәндең тормошо, ижад юлы тураһында яҙып үтәйем. Ул үҙенсәлекле журналист, халыҡ, ил-йорт яҙмышын, торошон яҡшы белгән яҙыусы. Был һыҙаттар, бындай талант ҡайҙан бирелгән икән уға?

Сәлимйән Миңлеәхмәт улы Бәҙретдинов байтаҡ йылдар мәктәп директоры булып эшләй. Тимәк, булмышы, асылы менән ул — уҡытыусы. Уның әҫәрҙәрендәге образлы телмәр үрнәктәре бына ҡайҙан килә икән! Сөнки уҡытыусы кеше һүҙ ҡәҙерен, һүҙ көсөн, һүҙ ҡөҙрәтен яҡшы белә. Шунһыҙ ул уҡытыусы булып эшләй ҙә алмаҫ ине.

Бер мәл ул, мәктәпте ҡалдырып, ”Совет Башҡортостаны” (”Башҡортостан”) гәзитенең үҙ хәбәрсеһе булып китте. Һүҙҙең мәғәнәһен, асылын тойомлай белмәгән кеше республика кимәлендәге абруйлы гәзиттең хәбәрсеһе вазифаһын үтәй алмаҫ ине. Һүҙҙең ғәмен, йәмен белеүе, халыҡ хәстәре менән йәшәүе, ғәҙеллеге уның абруйын үҫтерҙе, талантлы журналист кимәленә күтәрҙе. Артабан ул Башҡортостан ”Китап” нәшриәтенең баш мөхәррире итеп үрләтелде. Хәҙерге көндә ул ”Ватандаш” журналының баш мөхәррире урынбаҫары. Шуның менән бергә ул журналда ”Сәйәсәт”, ”Дәүләт һәм хоҡуҡ”, ”Публицистика” рубрикаларын алып бара.

Кешеләге һәләтте үҫтерергә була. Шул уҡ ваҡытта асылмай ҡалған һәләттәрҙең барлығын да онотмайыҡ. Баланың һәләте беренсе сиратта һәйбәт, сәләмәт тормош алып барған ғаиләлә асыла. ”Атанан күргән уҡ юнған” тигән әйтем юҡтан бар булмаған. Атай абруйы, инәй наҙы булған ғаиләнең тамырҙары көслө, ҡеүәтле. Сәлимйәндең дә ижадҡа ынтылышы нәҫел-ырыуынан киләлер. Мәҫәлән, уның ҡартатаһы Шакир уҙаман Әйле ырыуында данлыҡлы ҡурайсы булған. Һәр байрам, йыйын, туй-мәжлес кеүек тантаналарға халыҡ уны саҡырған. Ҡәрҙәштәренең күңелдәрен йыр-моң менән хисләндереп, асылына рухи көс биреп ғүмер иткән ул. Уның тел, һүҙ һәм йыр ҡомары Сәлимйәндең атаһына ла күскән. Талант таланттан асыла. Әйтәйек, Миңлеәхмәт уҙаман берәй йыйында, спектакль ҡуйғанда, байрам мәжлестәрендә йырлап ебәрә икән, ауылдаштары, ғәйри ир-аҫылдары ла күҙ йәштәрен тыя алмаған. Сәлимйәндең әйтеүенсә, атаһы йорт эштәрен башҡарғанда ла, ат егеп ҡырға сыҡҡанда ла йырлар, шиғырҙар, мәҙәк хәлдәр һөйләр булған. Сәлимйәндең балалыҡ йылдарын, үҫмер саҡ донъяһын атаһының моңо, фәһемле һүҙе балҡытҡан. Ана шул илаһи һүҙ ҡомары, йыр-моңға төрөлөп, Сәлимйәнгә лә күскән.

Үҙаллы ижадҡа, йәғни нимәлер булһа ла яҙып ҡарарға, ул Мәсәғүт педагогия училищеһында уҡыған сағында тотона. Шунан алып уның тәрән йөкмәткеле, фәһемле, мәғәнәле, үткер проблемалы мәҡәләләре, очерктары республика матбуғатында бер-бер артлы донъя күрә башлай, радионан яңғырай. Сәлимйәндең яҙмалары ташҡа баҫылған һүҙ ҡөҙрәтен аңлаусы уҡыусыларҙың күңелдәренә бик тә хуш килә.

Башҡортостан Яҙыусылар берлегенең өлкән әҙәби консультанты Рәшит Низамов Сәлимйәндең ”Ҡан ҡәрҙәштәр төйәге” нәфис-документаль йыйынтығына баһаламаһында билдәләүенсә: ”Бөтә очерктары ла һутлы тел, юғары художестволы кимәлдә яҙылған. Автор геройҙарының эш-ғәмәлдәрен, ғәйрилектәрен, сәмдәрен генә күрһәтеп ҡалмай,

шәхестәргә бәйле анык хәл-вакиғаларҙы ла тикшерә, тасуирлай, бының өсөн тарихи мәғлүмәттәрҙе, халыҡ ижадын, йолаларын оҫта файҙалана, шуның менән тормош-йәшәйештең тәрән ҡатламдарын һәм характерҙарҙы тулы асыуға өлгәшә. Был уның яҙмаларын мауыҡтырғыс, уҡымлы, фәһемле итә. Сәлимйәндең очерктарында новелла элементтары ла күҙәтелә. Был беҙҙең художестволы публицистикала бик ҡыҙыҡлы күренеш".

Тирә-йүндәге күренештәрҙе, хәл-вакиғаларҙы, кеше тормошоноң айырым миҙгелдәрен аҡ ҡағыҙға төшөрөү һәр кемдең дә ҡулынан килмәйҙер. Яҙған әйберең уҡыусыларҙың күңеленә барып етһен өсөн хикәйәләү генә етмәй, ә һүрәтләү, һынландырыу ҙа кәрәк. Йәғни, яҙманды "терелтеү", уға йән өрөү кәрәк. Әйтәйек, рәссамдың һүрәте үҙе хаҡында үҙе һөйләй. Шуның һымаҡ, публицистикала ла художестволылыҡ, образлылыҡ, поэтика ята. Телмәреңдәге һәр һүҙ, сағыштырыуҙар, һүрәтләү саралары халыҡсан, йөрәккә етерлек булһын. Шул ваҡытта һинең яҙған мәҡәләң, һүрәтләмәң, очеркың үҙе хаҡында үҙе һөйләр.

Халыҡсан телмәр, тел байлығы, һүҙ ябайлығы — Сәлимйән Бәҙретдиновтың төп таянысы. Яҙыусы, журналист яҙа-яҙа оҫтара. Ул оҫталыҡҡа ирешеү ҙур ныҡышмалыҡ талап итә, егәрлек тә кәрәк. Бына ошо сифаттарҙың барыһын да мин Сәлимйәндең журналислыҡ һәм яҙыусылыҡ булмышында күрәм, тоям, ғорурланам. Заман публицистикаһының сағыу йондоҙо итеп күрәм мин уны. Тәрән уйҙарға һала уның "Ғүмер артында — ғүмер", "Ҡан ҡәрҙәштәр төйәге", "Тереләргә — тере һыу" йыйынтыҡтары. Китаптарға исемдәр бик дөрөҫ, тапҡыр бирелгән. Кемдәр һуң улар "тереләр"? Ана шул һүҙгә асыҡлыҡ индереп китеү кәрәктер. Тормоштан, йәшәүҙән ваз кисмәгәндәрҙе "тереләр" тип атап булалыр. Шулай уҡ илдә барған хәл-вакиғаларға, ауырлыҡ менән донъя көткән кешеләрҙең яҙмышына битараф булмағандарҙы ла "тереләр" сафына индерергә мөмкиндер. Донъя тотҡаһымын, тип һанаған түрә-караларға үҙенең мөнәсәбәтен белдереп барыусыларҙы ла "тереләр" тип атарға, һис шикһеҙ, кәрәктер. Ғөмүмән, тормошта үҙ вазифаһын аңлаған, йәшәүҙең ҡәҙерен һәм мәғәнәһен тойған, кешелеклелек сифаттарын юғалтмаған рухлы кешеләр улар "тереләр". Донъяға, йәшәйешкә ҡул һелтәп ҡараған, кеше яҙмышына битараф булған, көн үтһен, сабата туҙһын, тип, үҙе хаҡында ғына хәстәрлек күреүсе әҙәми заттарҙы "тереләр" тип атап булмайҙыр.

"Тере һыу" тигәне — Сәлимйәндең хикәйәләре, хәтирәләре, мәҙәктәре, очерктары, йәнә ғибрәтле хәлдәр, имселәр, зыялылар, сәнғәт әһелдәре, эшһөйәрҙәр тураһындағы яҙмалары, сәйәхәтнамәләре, тарихнамәләре, мәҡәләләре. Быларҙың барыһы ла рухиәтебеҙгә көслө тәьҫир итә, тере һыуҙай — саф шишмә һыуындай яғылып ҡала, күҙҙәребеҙҙе был донъяға (баҙарлы-маҙарлы ғибрәтле тормошҡа) асыңҡырап ҡарарға мәжбүр итә. Уның "Ҡан ҡәрҙәштәр төйәге" китабының бер бүлеге лә юҡҡа ғына "Кеше — кешегә им, кеше — кешегә хайран" тип нарыҡланмағандыр.

Сәлимйән Бәҙретдинов оҙаҡ йылдар "Совет Башҡортостаны" ("Башҡортостан") гәзитенең үҙ хәбәрсеһе булып эшләне, ижад итте. Гәзит биттәрендә баҫылған һәр мәҡәләһе янып ижад итеү өлгөһө булды.

”Тереләргә — тере һыу” китабы һәр кемдең — уҡытыусының, тәрбиәсенең, мәктәп директорының, мәғарифҡа мөнәсәбәтле етәкселәрҙең, журналистарҙың, түрәләрҙең һәм башҡаларҙың өҫтәлендә методик ҡулланма рәүешендә ятырға тейеш. Бигерәк тә мәктәптә тормош һабаҡтары биреүсе дәреслек сифатында ҡулланылырға хаҡлы. ”Ғүмер артында — ғүмер”, ”Ҡан ҡәрҙәштәр төйәге”, ”Зов родной земли” китаптарын иһә ”Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте” буйынса уҡытыусылар ҡулланма итеп күптән файҙалана ла инде.

Инде авторҙың ”тере һыу”ҙарының ҡайһы берҙәренә ҡыҫҡаса байҡау яһайыҡ. Күңелдәргә тере һыу булырҙай хикәйәләренә, мәҡәләләренә туҡталып тормайым. Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә. Сәлимйән — журналист, яҙыусы, тарихсы, фольклорсы, этнокультура белгесе булараҡ — башҡорттар йәшәгән райондарҙы, сит өлкәләребеҙҙе айҡап сыҡҡан талантлы шәхесебеҙ. Уның юлдарында бик күп һәйбәт кешеләр, ғәжәп уҙамандарыбыҙ осраған. Быларҙан тыш, беҙ йәшәгән төйәгебеҙҙең (тау, урман, йылға, күлдәре) әлеге көндәге хәлен, уйланырлыҡ проблемаларын, бик тә ашығыс хәл ителәһе мәсьәләләрҙе лә ныҡлап, тәрән фәнни кимәлдә өйрәнеп йөрөгән. Бына ошоларҙың барыһы хаҡында ла беҙ авторҙың ”Тереләргә — тере һыу” китабынан уҡып беләбеҙ. Баҡтиһәң, аяҡ аҫтында ятҡан аҫыл таштарға, ожмах булырҙай, йәнгә сихәт бирерҙәй тәбиғи байлыҡтарыбыҙға хужа була белмәй, битарафлыҡ күрһәтәбеҙ икән. Был хаҡта тәбиғәттең үҙе лә кешеләргә иҫкәртеү яһай түгелме? Мәҫәлән, Учалы районындағы тәбиғәт ҡурсаулығы булырҙай үҙенсәлекле Оҙонкүлдең геүләүе — ғәмһеҙ кешеләргә, етәкселәргә етди иҫкәртеүе.

Китапҡа ингән һәр яҙма уйландыра. ”Убыр башы”, ”Атай рухы”, ”Йәшенле ямғыр”, ”Ширкәй” ҙә, ”Ир әмәлен тапҡан тау”, ”Асылдарҙы асты Арҡайым”, ”Бер минаның ике ярсығы”, ”Йәшкә мансылған мөхәббәт” тә... ”Тереләргә — тере һыу” китабында иғтибарымды ”Имселәр” тигән бүлек тә йәлеп итте. Бында беҙ ҡулдары алтын, тындары шифа, күҙҙәре изгелекле им-тылсым эйәһе Галина, ҡот ҡойоусы Хәлфиә, имләүсе Антонина Сергеевна менән танышабыҙ. Уларҙың йәнде сихәтләндерер ҡөҙрәтен күрәбеҙ, илаһи көс-ҡөҙрәткә эйә булыуҙарына һоҡланабыҙ. Имгәтелгән йәнгә, рәнйетелгән йәнгә уларҙың им-томдары, әмәл-таҡылдары тере һыу кеүек икәненә шикләнмәйбеҙ. Сәлимйән Бәҙретдиновтың имселәр тураһында яҙғандарын ҡеүәтләп, шуны әйтмәксемен: башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәт тарихында борон-борондан имселәр, күрәҙәселәр булған. Әйтәйек, фәнни медицинаның нигеҙендә лә халыҡтың табипсылыҡ сәнғәте ята түгелме ни? Әле лә һәр ауылдың үҙ имселәре бар.

Мин бында ”һылайым”, ”массаж яһайым”, ”күрәҙәсемен”, ”төрлө ауырыуҙарҙан арындырам” тип кеше алдаусы ”имселәр”, шулай уҡ Гробовойҙың туҙға яҙмаған ”әмәл-таҡылдары”, уның төрлө кимәлдәге ”секталары”, шуларҙың алдығына ышанып, меңәрләгән һумдарын ҡорбан итеүсе бер ҡатлы әҙәми заттар тураһында һүҙ алып бармайым. Ә һәр ауылдың борон-борондан йәшәү рәүешебеҙҙә ныҡлы урын алған ысын имселәре хаҡында бер нисә һүҙ әйтеп китмәксемен. Кемеһелер ноҡот бүлә, сыҡҡан быуынды ултырта, кемеһелер дарыу үләндәре менән ауырыуҙы һауыҡтыра, кемеһелер яҙҙың иң йәмле көндәрендә ауырыуҙы, шифалы үләнгә ятҡырып дауалай (ысулы былай: ятҡан кеше һыйыр-

лыҡ соҡор ҡаҙалар, шунда усаҡ яғалар, усаҡ янып бөткәс, эҫе көлөнә шифалы үлән түшәйҙәр, шунда ауырыуҙы һалалар, өҫтөн дә шифалы үлән менән ябалар. Ана шуны үләнгә ятыу тип атайҙар), кемеһелер ҡот ҡоя, һалам һала, күҙгә төшкән сүпте ала, кемеһелер бәүеле тотмағанды ырымлап һауыҡтыра, кемеһелер төрлө өйәнәктән йонсоғанды сәләмәтләндерә, билдең биртеүен һылап-һыйпап юҡҡа сығара, быума менән ыҙаланғандарҙы имләп ебәрә, кемеһелер йылан саҡҡанды ырымлай... Тимәк, һәр ауыл — үҙе бер халыҡ шифаханаһы һымаҡ була торғайны. Үҙенең терапевы, офтальмологы, хирургы, невропатологы һәм башҡа белгестәре булған. Тик уларҙың ҡулында скальпель, йәки башҡа инструменттар, көслө препараттар урынына тәбиғәттән алынған ҡөҙрәтле, шифалы дарыу үләндәре, ихтыяр көсө, шәфҡәт һәм мәрхәмәт тойғолары булған. Мәҫәлән, беҙҙең ауылда берәүҙең күҙенә дегәнәк төшкән. Үҙе уны белмәгән. Күҙем ауырта тип, табиптарға күренгән. Улар ҡараған да, үҙҙәренең теленсә диагноз ҡуйып, төрлө дарыуҙар биреп ҡайтарған. Дарыуҙарҙың файҙаһы теймәгәс, был кеше ауылыбыҙҙағы Зөлхизә инәйгә күренгән. Ул: "Күҙеңә дегәнәк төшкән дә инде", — тип "диагноз" ҡуйған да, күҙенә йылан ҡауын һалған. Шул ҡауға йәбешеп, күҙенә төшкән дегәнәк тә килеп сыҡҡан. Күҙгә төшкән сүпте Зөлхизә инәй, теле менән күҙ төптәрен ҡапшап, ялап та ала торғайны. Шуныһы ла мәғлүм булһын: ундай имселәр кешеләрҙән бер тин аҡса ла, бер әйбер ҙә алманы. "Ҡулдан килгән ярҙамды күрһәтеү — беҙҙең бурыс", — тиерҙәр ине.

Ауырыһаң, имсе күп тигәндәй, хәҙер белгәне лә, белмәгәне лә (былары күберәктер) имсе булып кәсеп итә. Ә борон-борондан йәшәү рәүешебеҙҙә ныҡлы урын алған им-томдарҙы белеүселәребеҙ аҙая. Тимәк, халыҡ медицинаһының үҙенсәлекле ҡанундары ла кеше хәтеренән юйыла бара.

Тереләргә илтер тере һыуыбыҙ һайыға бара түгелме? Сәлимйән Бәҙретдиновтың "Тереләргә — тере һыу" исемле китабындағы яҙмалар ана шул юйыла барған хәтерҙе лә асҡандай, асылдарға ҡайтарғандай. Әйткәндәй, уның 2006 йылда "Ватандаш" журналында донъя күргән "Бал ҡорто мөғжизәһе", "Башҡорт балы" тигән ғәйәт ҡыҙыҡлы фәнни-популяр очерктары ла шуны раҫлай һәм йотлоғоп уҡыла. Сәлимйән үҙе лә ҡәрҙәштәрен имләүсе, уларҙың рухтарын һауыҡтырыусы әҙип.

Талантлы журналист һәм яҙыусы Сәлимйән Бәҙретдинов — заман һулышын, заман ағышын матбуғат биттәрендә киң һәм әүҙем яҡтыртыусыларҙың береһе. Заман һулышын кем иркенәйтә? Заман ағышын кем үҙгәртә ала? Әлбиттә, арҙаҡлы шәхестәребеҙ, зыялыларыбыҙ, сәнғәт әһелдәребеҙ, эшһөйәрҙәребеҙ. Атап әйткәндә, кемдәр һуң? Бына уларҙың ҡайһы берҙәренең исемдәре, Сәлимйәндең үрнәккә лә, күрмәккә лә бар геройҙары: тереләргә тере һыу илтеүсе табип Зәкиә Тереғолова, Кинйә абыҙ вариҫы — ғалим-аграрсы Нурамбәк Арыҫланов, этнография остазы — тарихсы Рим Янғужин, балаларға төплө белем һәм тәрбиә биреүҙә йәшәүҙең йәмен тапҡан тәжрибәле уҡытыусы Салауат Рәсүлев, йыраусылар Спартак Ильясов, Фәрзәнә Фәтҡуллина, Розалия Фәйезова, бейеүселәр Әлфирә Сафиуллина, Рәйес Низаметдинов, моңдан яралған йырсы Гөлсөм Бикбулатова, бар донъяны һоҡландырыусы имитатор Вәкил Ғәтиәтуллин, һүрелмәҫ ҡомар менән ижад итеүсе

скульптор Хәйҙәр Ғарипов, эшҡыуарҙар Риф Иҫәнов, Эльвира Батыршина һәм башҡа бик күптәр.

”Тереләргә — тере һыу” китабында ҡыҙыҡлы сәйәхәтнамәләр, фәһемле тарихнамәләр, тәрән мәғәнәле, ҙур проблемалы мәҡәләләр ҙә урын алған.

Сәлимйән Бәҙретдинов тормош менән бергә ҡайнап йәшәй. Уның журналислыҡ ижад үҙенсәлектәре тураһында студенттар диплом эштәре яҡлай. Яҙған китаптары, ижады тураһында төрлө кимәлдәге баһаламалар, рецензиялар донъя күрә тора. Республика матбуғатында Таңсулпан Ғарипованың ”Йөрәктән сыҡҡан һүҙҙәр”, Ризван Хажиевтың ”Ғәҙеллек илсеһе”, Фина Латипованың ”Йәндәрем ҡуҙҙай яна”, Рәүеф Шаһиевтың ”Геройҙары беҙҙең арала”, Салауат Рәсүлевтың ”Дуҫ хаҡында һүҙ” тигән рецензиялары, очерктары баҫылды. Сәлимйәндең ижадында яҡтыртылған геройҙар — йәштәргә фәһем, йәшәү үрнәге биреүсе көслө рухлы кешеләр. Уның күп кенә китаптары уҡыу йорттарында ”Башҡортостан мәҙәниәте” дәреслегенә өҫтәлмә дидактик материал рәүешендә ҡулланыла. Әлегә тиклем ул туғыҙ китаптың авторы һәм төҙөүсеһе. Шулар араһында ”Муртаза Рахимов. Башкортостан — моя судьба” тигән китап та бар.

Сәлимйән Бәҙретдиновтың ижады республиканан ситтә лә танылыу яуланы. Мәҫәлән, Шүлгәнташ мәмерйәһенең хәҙерге хәле, проблемалары тураһында яҙылған фәнни-популяр очеркы журналистарҙың ”Рәсәй экологияһы. Быуаттарҙан быуаттарға” VIII Бөтә Рәсәй конкурсында дипломға лайыҡ булды.

Рәсәй Яҙыусылар союзы, Журналистар союзы ағзаһы Сәлимйән Бәҙретдинов — Шәһит Хоҙайбирҙин һәм Муса Мортазин исемендәге премиялар, республика күләмендә үткәрелгән ”Башҡортостан экологияһы”, ”Өйөбөҙгә тыныслыҡ” конкурстары лауреаты. Ул Башҡортостан Республикаһының Почет Грамотаһы, ”Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙы үткәреүҙә күрһәткән уңыштары өсөн” миҙалы менән бүләкләнгән. Матбуғаттағы ҡаҙаныштары өсөн уға Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре тигән маҡтаулы исем бирелгән. Уның хаҡындағы биографик мәғлүмәттәрҙе ”Башҡорт халҡының данлыҡлы кешеләре”, ”Писатели земли башкирской” тигән белешмә-китаптарҙан, күп томлы ”Башҡортостан” энциклопедияһынан уҡырға мөмкин.

Бына ниндәй шәхес ул — беҙҙең Сәлимйән. Кем тураһында яҙһа ла ул, кешенең асылын тойоп яҙа, кешенең асылын асып һала. Шуға ла уның китаптары ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡыла. Был хаҡта күренекле әҙибә Таңсулпан Ғарипова ошолай тип яҙа: ”Сәлимйәндең тарихи яҙмаларын, очерктарын, мәҡәләләрен уҡығанда әллә ҡайҙан, төпкөлдән килгән моң ҡолаҡҡамы, йөрәккәме салынғандай булды. Эс-бауырға үтеп инә торған таныш был моң ”Буранбай” ине. Сәғәт төнгө ике. Был ваҡытта кем йырлаһын?.. Шул саҡта мин был моңдоң Сәлимйәндең яҙмаларын уҡыуҙан, уның халыҡ, ил-йорт, ер яҙмышы өсөн тәрән борсолоу менән яҙған әҫәрҙәрен байҡауҙан тыуған тәьҫорат икәненә төшөндөм. ”Табаҡ та ғына табаҡ, ай, аҡ ҡағыҙ...” Күпме уйланыуҙар, яныуҙар, һандар, мәғлүмәттәр. Журналистың йөрәк ҡанына манып яҙылған юлдар, ҡәләменән сыҡҡан фәһемле һәм дәлилле һүҙҙәр. Улар халыҡтың йөрәгенә һәм аҡылына етә. Табаҡ та ғына табаҡ был яҙмалар намыҫҡа тейә, көрәшкә, эшмәкәрлеккә, күркәм йәшәргә саҡыра!”